# Теркәүестәр.Киçәксә
# ләр.

Теркәүестәр – һөйләмдең тиң киҫәктәрен һәм ҡушма һөйләм эсендәге ябай һөйләмдәрҙе үҙ-ара теркәү өсөн ҡулланылған ярҙамсы һүҙҙәр.

Киҫәксәләр - айырым һүҙгә йәки һөйләмгә төрлө мәғәнә биҙәктәре (раҫлау, көсәйтеү, сикләү, һорау, икеләнеү һ.б.) өҫтәүсе ярҙамсы һүҙ төркөмө.

| Теҙеү теркәүестәре | Эйәртеү теркәүестәре |
| --- | --- |
| һәм , ла-лә (та-тә, да –дә), ә, йәки, йә, иһә, йәнә, тағы, шулай уҡ, ләкин, әммә, Тик, фәҡәт,юҡһа, ни, әллә, әле, берсә, бәлки | Сөнки, тимәк, шуға, шунлыҡтан, хатта, шуға күрә, шул арҡала, шулай булғас, шуның һөҙөмтәһендә, әгәр, әгәр ҙә мәгәр, гүйә, гүйә ки, гәрсә |

# Һөйләмдәрҙе дөрөҫ яҙырға

Һин пароход та бараһың ә ай һинең менән бергә бара.

Тимеркәй әсәһенең ҡосағынан әкрен генә шыуып төштөлә , үҙ эшенә тотондо.
Ул берсә йылмая берсә көлә ине.
Мин туғанымды йә апайымды саҡырам.
Ҡояш сыҡты ла көн йылынды.
Ҡояш сыҡты  ла яңынан болот араһына инеп йуғалды.

| мәғәнә үҙенсәлектәре | киҫәксәләрҙең бүленеше. |
| --- | --- |
| Көсәйтеү, раҫлау: | ла –лә (та-тә, да –дә, ҙа -:ҙә) таhа-тәhә, та баhа, бит, тағы, иң, -сы –се, ап- |
| сикләү | Ғына-генә, уҡ -үк |
| икеләнеү | Тыр-тер, дыр-дер, лыр-лер |
| hорау | -мы-ме, -мы ни, -мы икән |

## теркәүесме, киҫәксәме?

Фәһим шишмәне ырғып сыҡты ла эре генә атлап  китеп тә барҙы.
Күл эсенә алып китә лә сығармай ҙа ҡуя.
Бәлки, ул да мине иҫенә төшөрә торғандыр.
Иҙәндәр ҡайҙалыр шыуып юғалған, ә үҙе һауала аҫылынып тороп ҡалған кеүек тойолған ваҡыттар ҙа булды.